## I ВАРИАНТ

**1. *Ҡәләмде* һүҙендә ниндәй ялғау бар?**

1. Һан ялғауы
2. Һан ялғауы һәм зат ялғауы
3. Килеш ялғауы
4. Зат ялғауы

**2. Ҡағиҙә буйынса дөрөҫ яҙылған ҡушма һүҙ нисәнсе урында тора?**

1. Эреле-уаҡлы
2. Эреле-ваҡлы
3. Эрле-уаҡлы
4. Эрле-ваҡлы

**3. Ҡайһы һүҙ ҡағиҙә буйынса дөрөҫ яҙылған?**

1. Волостте
2. Волостьте
3. Волостты
4. Волосты

**4. Дөрөҫ яҙылған һүҙ нисәнсе урында тора?**

1. Отпускта
2. Отпускыла
3. Отпускелә
4. Отпускала

**5. Дөрөҫ яҙылған һүҙ торған урынды билдәләгеҙ?**

1. Бакуҙан
2. Бакунан
3. Бакыуҙан
4. Бакудан

**6. Ҡағиҙә буйынса дөрөҫ яҙылған һүҙ нисәнсе урында тора?**

1. Октябрҙа
2. Октябрьҙа
3. Октябрҙә
4. Октяберҙә

**7. Ҡайһы һүҙ ҡағиҙә буйынса дөрөҫ яҙылған?**

1. Митингала
2. Митингта
3. Митингтә
4. Митингыла

**8. *Минск* һүҙенең урын-ваҡыт килеш формаһы ҡайһы осраҡта дөрөҫ яҙылған?**

1. Минскта
2. Минсктә
3. Минскиҙа
4. Минскиҙә

**9. Ҡайһы вариант ҡағиҙә буйынса дөрөҫ яҙылған?**

1. 3-өнсө күнегеү
2. 3-нсө күнегеү
3. 3-сө күнегеү
4. 3-се күнегеү

**10. Дөрөҫ яҙылған вариантты күрһәтегеҙ:**

1. Ялан-аяҡ
2. Ялан-айаҡ
3. Йалан-аяҡ
4. Ялан аяҡ

**11.** ***Емеш*** **һүҙендә нисә тартынҡы, нисә һуҙынҡы өн бар?**

1. 4 тартынҡы, 1 һуҙынҡы өн
2. 3 тартынҡы, 2 һуҙынҡы өн
3. 2 тартынҡы, 3 һуҙынҡы өн
4. 1 тартынҡы, 4 һуҙынҡы өн

**12. Һуҙынҡы өндән башланмаған һүҙҙе күрһәтегеҙ:**

1. Еләк
2. Өлөш
3. Ураҡ
4. Ашлыҡ

**13. Ҡалын һуҙынҡы өндән башланған һүҙҙе күрһәтегеҙ:**

1. Осҡон
2. Өлгөр
3. Үткенсе
4. Ирәндек

**14. Асыҡ ижеккә тамамланған һүҙҙе билдәләгеҙ:**

1. Бүләк
2. Бүлмә
3. Балаҡ
4. Белем

**15.** ***Игенселәргә*** **һүҙендә баҫым нисәнсе ижеккә төшә:**
1. Тәүге  ижеккә
2. Икенсе ижеккә
3. Өсөнсө ижеккә
4. Һуңғы ижеккә

**16. Ҡайһы һүҙҙең бүленеше юлдан-юлға дөрөҫ күсереү ҡағиҙәләренә тап килә?**

1. Баш-аҡ
2. Иль-яс
3. А-тай
4. Донъ-я

**17. Ҡайһы һүҙ һаңғырау тартынҡынан башланған?**

1. Белем
2. Дарыу
3. Зарар
4. Тауыш

**18. Тел фәненең ниндәй бүлеге һүҙҙәрҙең төҙөлөшөн, һүҙ төркөмдәрен өйрәнә?**

1. Синтаксис
2. Морфология
3. Лексикология
4. Фразеология

**19. Һуҙынҡы өн менән башланмаған һүҙҙе билдәләгеҙ?**

1. Асҡыс
2. Яҡшы
3. Итек
4. Өлкәр

**20. Асыҡ ижектәрҙән генә торған һүҙҙе күрһәтегеҙ:**

1. Башлыҡ
2. Бала
3. Бешкәк
4. Бысаҡ

**21. Уртаҡлыҡ исемде билдәләгеҙ:**

1. Урал
2. Хәмит
3. Яҙыусы
4. Эйек

**22. Күплектә торған һүҙҙе билдәләгеҙ:**

1. Скипидар
2. Миҡдар
3. Легендар
4. Ауылдар

**23. <u>*Дәфтәрем*</u> *юғалды* һөйләмендә аҫтына һыҙылған һүҙҙең ялғау төрөн билдәләгеҙ:**

1. Хәбәрлек заты ялғауы
2. Эйәлек заты юғалды
3. Урын-ваҡыт килеш ялғауы
4. Сығанаҡ килеш ялғауы

**24. *Мин* <u>*көслөмөн*</u> һөйләмендә аҫтына һыҙылған һүҙҙең ялғау төрөн билдәләгеҙ:**

1. Төбәү килеш ялғауы
2. Хәбәрлек заты ялғауы
3. Эйәлек заты ялғауы
4. Урын-ваҡыт килеш ялғауы

**25. *Күгерәк* сифатының дәрәжәһен билдәләгеҙ:**
1. Төп дәрәжәлә
2. Сағыштырыу дәрәжәһе
3. Артыҡлыҡ дәрәжәһе
4. Аҙһытыу дәрәжәһе

**26.** ***Берәү бар – һүҙҙе күңеленә йыя, берәү бар – һүҙҙе ҡарынына йыя*** **мәҡәлендә һандарҙың төркөмсәһен билдәләгеҙ:**

1. Төп һан
2. Рәт һаны
3. Йыйыу һаны
4. Сама һаны

**27.** ***Күберәген мин тыңлайым, ә Фәнисә йырлай*** **һөйләмендә алмашты табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ:**

1. Зат алмашы
2. Билдәләү алмашы
3. Күрһәтеү алмашы
4. Билдәһеҙлек алмашы

**28.** ***Татлы бал <u>йыйыусы</u> ҡорттар тереклеккә зыян килтермәйҙәр*** **һөйләмендә ҡылымдың ниндәй төркөмсәгә ҡарағанлығын билдәләгеҙ:**

1. Уртаҡ ҡылым
2. Хәл ҡылым
3. Исем ҡылым
4. Сифат ҡылымдың хәҙерге заман формаһы

**29.** ***Япраҡ менән япраҡ һөйләшә*** **һөйләмендә ҡылымдың йүнәлешен билдәләгеҙ:**

1. Төп йүнәлеш
2. Ҡайтым йүнәлеше
3. Төшөм йүнәлеше
4. Уртаҡлыҡ йүнәлеше

**30.** ***Бөгөн киноға барабыҙ*** **һөйләмендә рәүештең төркөмсәһен билдәләгеҙ:**

1. Төп рәүеш
2. Ваҡыт рәүеше
3. Урын рәүеше
4. Күләм-дәрәжә рәүеше

**31. Ярҙамсы һүҙ төркөмөнә ҡараған һүҙ төркөмөн күрһәтегеҙ:**

1. Алмаш
2. Бәйләүес
3. Исем
4. Ҡылым

**32.** ***Янғын сыҡҡан*** **һөйләмендә ҡылым ниндәй заманда килгән?**

1. Хәҙерге заманда
2. Шаһитлы үткән заманда
3. Шаһитһыҙ үткән  заманда
4. Билдәле киләсәк заманда

**33.** ***Бала – ҡабатланмаҫ гүзәллек һәм баһаһыҙ ҡиммәт*** **һөйләмендә теркәүесте табып, уның төрөн билдәләгеҙ:**

1. Аныҡлау теркәүесе
2. Бүлеү теркәүесе
3. Йыйыу теркәүесе
4. **Ҡаршы ҡуйыу теркәүесе**

**34.** ***Күршең менән татыу бул*** **һөйләмендә бәйләүесте табып, уның ниндәй килештән һуң килеүен билдәләгеҙ:**

1. Төп килештән һуң
2. Урын-ваҡыт килештән һуң
3. Төшөм килештән һуң
4. Эйәлек килештән һуң

**35.** ***Тура һәм дөйөм һайлауҙар тик беҙҙең илдә генә*** **һөйләмендә киҫәксәне табып, төрөн билдәләгеҙ:**

1. Һорау киҫәксәһе
2. Көсәйтеү-раҫлау киҫәксәһе
3. Сикләү киҫәксәһе
4. Икеләнеү киҫәксәһе

**36.** ***Ҡалаға китер <u>булһаң</u>, миңә әйтмәй китмә*** **һөйләмендә аҫтына һыҙылған ҡылымдың һөйкәлешен билдәләгеҙ:**

1. Бойороҡ һөйкәлеше
2. Теләк-өндәү һөйкәлеше
3. Хәбәр һөйкәлеше
4. Шарт һөйкәлеше

**37.** ***Мин <u>башҡортмон</u>*** **һөйләмендә аҫтына һыҙылған һүҙҙең нимә менән үҙгәргәнен билдәләгеҙ:**

1. Эйәлек заты менән
2. Хәбәрлек менән
3. Килеш менән
4. Заман менән

**38.** ***Ул әкрен генә эре-эре атланы*** **һөйләмендә ҡылымдың заман формаһын билдәләгеҙ:**

1. Билдәле киләсәк заман
2. Билдәһеҙ киләсәк заман
3. Шаһитлы үткән заман
4. Шаһитһыҙ үткән заман

**39.** ***Малайҙарҙың кәйефе <u>һүрән</u> күренә*** **һөйләмендә аҫтына һыҙылған рәүештең төркөмсәһен билдәләгеҙ:**

1. Күләм-дәрәжә рәүеше
2. Оҡшатыу рәүеше
3. Урын рәүеше
4. Төп рәүеш

**40.** ***Уның <u>күҙенә</u> сүп төшкән*** **һөйләмендә аҫтына һыҙылған исемдең ниндәй килештә торғанлығын билдәләгеҙ:**

1. Төп килештә
2. Эйәлек килештә
3. Төбәү килештә
4. Төшөм килештә

**41.** ***Алда бераү күренде*** **һөйләмендә эйәне табып, уның ниндәй һүҙ төркөмөнән килгәнен билдәләгеҙ:**

1. Исем
2. Ҡылым
3. Һан
4. Сифат

**42.** ***Ике икең – дүрт*** **һөйләмендә аҙаҡҡы һүҙҙең ниндәй һөйләм киҫәге булыуын билдәләгеҙ:**

1. Эйә
2. Хәбәр
3. Тултырыусы
4. Аныҡлаусы

**43.** ***Ҡунаҡ аҙ ултырыр, күп һынар*** **мәҡәлендә рәүештәр һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килгән?**

1. Шарт хәле
2. Ваҡыт хәле
3. Урын хәле
4. Күләм-дәрәжә хәле

**44.** ***Мин хәҙер шатланам да, борсолам да*** **һөйләмендә тиң киҫәктәрҙең төрөн билдәләгеҙ:**

1. Тиң эйәләр
2. Тиң хәбәрҙәр
3. Тиң тултырыусылар
4. Тиң аныҡлаусылар

**45.** ***Кем дә кем тағы енәйәткә бара, ул шәфҡәт көтмәһен*** **һөйләмендә эйәрсән һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ:**

1. Эйә эйәрсән һөйләм
2. Хәбәр эйәрсән һөйләм
3. Аныҡлаусы эйәрсән һөйләм
4. Тултырыусы эйәрсән һөйләм

**46.** ***Атайым – уҡытыусы*** **һөйләмендә һыҙыҡтың ҡуйылышы ҡайһы яуап менән аңлатылғанын билдәләгеҙ:**

1. Дөйөмләштереүсе һүҙ алдында ҡуйылған
2. Һөйләмдең хәбәре төшөп ҡалған өсөн ҡуйылған
3. Инеш һүҙҙе айырыу өсөн ҡуйылған
4. Бер үк һүҙ төркөмөнән килгән эйә менән хәбәр араһында ҡуйылған

**47. Түбәндәге бер составлы һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ:** ***Атаңдың ғына улы булма, халҡыңдың да улы бул.***

1. Эйәһеҙ һөйләм
2. Билдәһеҙ эйәле һөйләм
3. Билдәле эйәле һөйләм
4. Дөйөм эйәле һөйләм

**48.** ***Май айы инеү менән, күлдең тирә-яғында кешеләр ҡайнаша башлай*** **ҡушма һөйләмендә хәл эйәрсән һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ:**

1. Ваҡыт һөйләм
2. Маҡсат һөйләм
3. Сағыштырыу һөйләм
4. Урын һөйләм

**49.** ***Йыш ҡына шулай була торғайны отряд туҡталған ерҙә Салауат яңғыҙы ғына Бохайырҙы эҙләргә китә*** **һөйләмендә ниндәй тыныш билдәһе етешмәгәнлеген билдәләгеҙ:**

1. Өтөр
2. Нөктәле өтөр
3. Ике нөктә
4. Һыҙыҡ

**50.** ***Аҡрын ғына ишек асылды, һәм кабинетҡа ҡыйыр-ҡыймаç ҡына бер малай килеп инде*** **һөйләменең төрөн билдәләгеҙ:**

1. Эйәртеүле ҡушма һөйләм
2. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм
3. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм
4. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләм

## II ВАРИАНТ

**1.** ***Таң ҡалыу, арт һабағын уҡытыу, уртаҡ тел табыу*** **һүҙҙәрен мәғәнәләре буйынса нисек атап була?**

1. Омонимдар
2. Антонимдар
3. Фразеологизмдар
4. Диалектизмдар

**2. Аҫтына һыҙылған һүҙҙәр нисек атала? *Тышта борсаҡ яуа – Быйыл борсаҡ уңған*.**

1. Омонимдар
2. Антонимдар
3. Диалектизмдар
4. Синонимдар

**3. *Баш* һүҙе ҡайһы осраҡта тура мәғәнәһендә ҡулланылған?**

1. Баш күтәреүселәр
2. Тау башы
3. Кеше башы
4. Баш ҡатырыу

**4. Төп башҡорт һүҙен билдәләгеҙ:**

1. сәнғәт
2. ағай
3. ҡәләм
4. иғтибар

**5. Һөйләмдәрҙең ҡайһынынһында исем урын-ваҡыт килештә килгән?**

1. Икмәкте хурлама, ҙурла.
2. Изгелектең иртәһе – кисе юҡ.
3. Ат – туйған ерендә, егет – тыуған илендә.
4. Булыр бала биләүҙән билдәле.

**6. Һөйкәлеш категорияһы ниндәй һүҙ төркөмөнә хас?**

1. исем
2. ҡылым
3. сифат
4. киҫәксә

**7. Урын рәүештәрен табығыҙ:**

1. Яҡында, бында, алда, йәнәшәлә
2. Шәп, рәхәт, тиҙ, ҡапыл, кинәт
3. Элек, борон, иртән, бая, бөгөн
4. Күп, байтаҡ, әҙ-мәҙ, өсләтә, саҡ-саҡ

**8. Ҡайһы һөйләмдә һан исемләшкән, йәғни иҫәпте лә, исемде лә белдереп килә?**

1. Мостиктың дүрт мөйөшөндә - дүрт матрос.
2. Етеһе лә матур, етеһе лә батыр икән.
3. Ер йөҙөндә биш меңләгән тел бар.
4. Инде өсөнсө йыл һуғыш бара.

**9.** ***Барҙы – барған – бара – барасаҡ – барыр.*** **Ҡылымдың ниндәй формаларына миҫалдар бирелгән?**

1. Һөйкәлеш формалары
2. Барлыҡ-юҡлыҡ формалары
3. Йүнәлеш формалары
4. Заман формалары

**10.** ***Бер-береңә ышанырға, иғтибарлы булырға, дуҫыңдың эштәре, тормошо менән ҡыҙыҡһынырға, бер-береңә ярҙам итергә, таянырға.*** **Был һөйләмдә ҡылымдың ниндәй төркөмсәһенә миҫалдар бар?**

1. Исем ҡылым
2. Хәл ҡылым
3. Сифат ҡылым
4. Уртаҡ ҡылым

**11. Ҡылымдың ҡайһы һөйкәлеш формаһы ҡылымдарҙың тамыры йәки нигеҙе формаһы менән тап килә?**

1. Бойороҡ һөйкәлеше
2. Шарт һөйкәлеше
3. Хәбәр һөйкәлеше
4. Теләк һөйкәлеше

**12. Йөкмәтеү йүнәлеше ҡылымдары бирелгән юлды билдәләгеҙ**:

1. Уҡый, яҙа, йыуа, килә, китә
2. Сабырһыҙлана, кейенә, биҙәнә
3. Йыуыла, төҙөлә, биҙәлә, уҡыла
4. Эшләтә, яҙҙыра, көлдөрә

**13. *Тейенде барып ҡулыма алғым, һөйгөм килде*. Был һөйләмдәге ҡылымдар ниндәй һөйкәлеш ҡылымдары?**

1. Хәбәр һөйкәлеше
2. Шарт һөйкәлеше
3. Бойороҡ һөйкәлеше
4. Теләк һөйкәлеше

**14. *Йылға нисектер ҡапыл йәнләнеберәк китте* һөйләмендә ҡылымдың заман формаһын билдәләгеҙ:**

1. Шаһитлы үткән заман
2. Шаһитһыҙ үткән заман
3. Хәҙерге заман
4. Билдәле киләсәк заман

**15. *Егет үҙе өсөн тыуа, иле өсөн үлә* һөйләмендә бәйләүестең ниндәй килештән һуң килгәнен билдәләгеҙ:**

1. Төп килештән һуң
2. Төбәү килештән һуң
3. Сығанаҡ килештән һуң
4. Төшөм килештән һуң

**16.** ***Тупраҡтар сөм ҡара бында, тупраҡ һутланып тора*** **һөйләмендә киҫәксәне табып, уның төрөн билдәләгеҙ:**

1. Көсәйтеү киҫәксәһе
2. Һорау киҫәксәһе
3. Раҫлау киҫәксәһе
4. Икеләнеү киҫәксәһе

**17.** ***Ҡуш тирәк шаулай башланы, ямғыр булыр, <u>ахыры</u>*** **һөйләмендә аҫтына һыҙылған һүҙ ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?**

1. Мөнәсәбәт һүҙ
2. Киҫәксә
3. Бәйләүес
4. Ымлыҡ

**18.** ***Быйыл ҡыш айырыуса һалҡын*** **һөйләменең хәбәре ниндәй һүҙ төркөмөнән килгән?**

1. Сифаттан
2. Алмаштан
3. Рәүештән
4. Ымлыҡтан

**19. Ымлыҡтарҙы күрһәтегеҙ:**

1. шикелле, аша, хаҡта, һымаҡ
2. үтә, иң, ифрат, ғына
3. бәй, атаҡ, ай-һай, һай
4. тейеш, кәрәк, икән, бар

**20. Билдәләү алмаштарын күрһәтегеҙ:**

1. нисә, ҡасан, ниндәй, ҡайҙа
2. ҡайҙалыр, кемдер, әллә ни, нимәлер
3. һис кем, бер ни, бер нәмә, бер кем дә
4. үҙем, үҙең, үҙе, үҙегеҙ

**21. Теркәүестең төрөн билдәләгеҙ: сөнки**

1. Сәбәп теркәүесе
2. Шарт теркәүесе
3. Йыйыу теркәүесе
4. Ҡаршы ҡуйыу теркәүесе

**22. Сағыштырыу дәрәжәһендәге сифаттарҙан ғына торған юлды билдәләгеҙ:**

1 Ағыраҡ, ҙурыраҡ, ҡыҙылыраҡ, матурыраҡ
2. Йәшерәк, һарғылт, көслө, йәм-йәшел
3. Күм-күк, ифрат матур, үтә көслө
4. Алһыу, матурыраҡ, оҙонса, ҡып-ҡыҙыл

**23. Ҡайһы юлда һан һүҙ төркөмөнә ҡараған һүҙҙәрҙең һорауҙары бирелгән?**

1. Кем? Кемдең? Кемгә? Кемде? Кемдә? Кемдән?
2. Нисек? Ҡасан? Ҡайҙа? Күпме? Ни өсөн?
3. Ни эшләй? Ни эшләгән? Ни эшләне?
4. Нисә? Нисәү? Нисәнсе? Нисәшәр? Нисә самаһы?

**24. Составында һөҙөмтә теркәүесе булған һөйләмде билдәләгеҙ:**

1. Мәскәүҙә күп минең дуҫтарым, шуға күрә тыуған еремдең мин алам бары бер ус тупрағын.
2. Улар әле береһен, әле икенсеһен бүлеп, шыбырлашып хәбәр һөйләйҙәр.
3. Мин дә юрый уның артынан тәгәрәгән булдым.
4. Иртән дә, көндөҙ ҙә, кис тә үҙ урынында ҡалды.

**25.** ***Ағайым <u>ҡайтып</u>, бер аҙ <u>торғас</u> та, уны эшкә <u>саҡырҙылар</u>* һөйләмендә аҫтына һыҙылған ҡылымдарҙың ҡайһыһы – хәл ҡылым, ҡайһыһы – хәбәр һөйкәлеше ҡылымы?**

1. *Ҡайтып, торғас* – хәл ҡылымдар, *саҡырҙылар* – хәбәр һөйкәлеше
2. *Ҡайтып, торғас* – хәбәр һөйк., *саҡырҙылар* – хәл ҡылым
3. *Ҡайтып* – хәл ҡылым, *торғас, саҡырҙылар* – хәбәр һөйк.
4. *Торғас, саҡырҙылар* – хәбәр һөйк., *ҡайтып* – хәл ҡылым

**26.** ***Туғандарыма*** **һүҙендә ниндәй ялғау бар?**

1. Һан ялғауы
2. Һан ялғауы, зат һәм килеш ялғауы
3. Килеш ялғауы
4. Зат ялғауы

**27.** ***Урман, яулыҡ, һауыт, ыласын*** **һүҙҙәре нисек яһалған?**

1. Яһаусы ялғауҙар ярҙамында
2. Был һүҙҙәр яһалма һүҙҙәр түгел, тамыр һүҙҙәр
3. Һүҙҙәрҙе бәйләү юлы менән
4. Һүҙҙәрҙе ҡабатлау юлы менән

**28. Ҡайһы юлда тик тамырҙаш һүҙҙәр бирелгән?**

1. Ағарыу, ағартыу, ағыу, ағарған
2. Ел, елкә, елкән, елгәргес
3. Килешеү, килешә, килештәр, килештереү
4. Хеҙмәт, хеҙмәтсе, хеҙмәте, хеҙмәтенә

**29. Һуҙынҡы өндән башланмаған һүҙҙәр генә булған юлды табырға.**

1. Алтын, эйәр, илсе, Урал, оло
2. Яҡын, йәнлек, ватан, аҡыл
3. Яусы, юлаусы, елпеүес, Юрғашты
4. Ирәмәл, ҡаһарман, яугир, ынйы

**30.** ***Еңеүсе*** **һүҙендә нисә тартынҡы, нисә һуҙынҡы өн бар?**

1. 3 һуҙынҡы, 4 тартынҡы
2. 4 һуҙынҡы, 3 тартынҡы
3. 3 һуҙынҡы, 3 тартынҡы
4. 4 һуҙынҡы, 4 тартынҡы

**31.** ***Юлъяҙма*** **һүҙендә нисә тартынҡы, нисә һуҙынҡы өн бар?**

1. Бөтәһе лә һуҙынҡы
2. 3 тартынҡы, 3 һуҙынҡы
3. 4 тартынҡы, 3 һуҙынҡы
4. 5 тартынҡы, 3 һуҙынҡы

**32. Ҡайһы һүҙҙә ялғау сингармонизм законына ярашлы дөрөҫ яҙылған?**

1. Төҙөлөштөң
2. Болотто
3. Гөлдөң
4. Бөтәһендә лә

**33.** ***Фото, код, ток*** **һүҙҙәрендәге о хәрефе ҡайһы килеш ялғауында һаҡлана?**

1. Эйәлек
2. Төшөм
3. Сығанаҡ
4. Береһендә лә яҙылмай

**34. Яҙылышы дөрөҫ булмаған һүҙ булған юлды күрһәтегеҙ:**

1. көньяҡ
2. төньяҡ
3. һүҙьяһалыш
4. бөтәһе лә дөрөҫ

**35.** ***Арыҫлан йөрәкле*** **фразеологик берәмеге ниндәй мәғәнә аңлата?**

1. етеҙ
2. уҫал
3. батыр
4. аҡыллы

**36.** ***Ашлыҡ уңһын, баҫыу гөрләп торһон, Мәңге зәңгәр булһын һауа!*** **Һөйләменең төрөн билдәләгеҙ:**

1. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм
2. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм
3. Ҡатнаш ҡушма һөйләм
4. Теҙем

**37.** ***Минең** **атаҡлы башҡорт юртаҡтарын күргем килә*** **һөйләмендә аҫтына һыҙылған һүҙ ниндәй һөйләм киҫәге?**

1. Тултырыусы
2. Хәл
3. Сифат
4. Аныҡлаусы

**38. Бер составлы һөйләмдең төрөн билдәләргә:**
***Ҡайтыр инем.***

1. Билдәле эйәле һөйләм
2. Билдәһеҙ эйәле һөйләм
3. Эйәһеҙ һөйләм
4. Дөйөм эйәле һөйләм

**39. Эйә эйәрсәнле эйәртеүле ҡушма һөйләмде билдәләргә:**

1. Шуныһы бөгөн үкенесле: Мәсәғүт ағайҙың бер генә хаты ла ҡалманы миндә.
2. Шундай кешеләр була: бер күреүҙән үк ул һине үҙенә тарта.
3. Шулай ғәҙәтләнгәнмен: тыуған ауылда тәүҙә тирә-яҡты йөрөп ҡарап сығам.
4. Эш кемдеке – бүләк шуныҡы.

**40. Схемаға тап килгән һөйләмде билдәләгеҙ: (аныҡлаусы һөйләм), (ваҡыт һөйләм), (баш һөйләм):**

1. Зөлҡәрнәй әйткәнде башҡалар ҙа дөрөҫләгәс, Буранбай тағы ярһыны.
2. Сикә сәстәре ағарған ике ҡарт һалдат шундай итеп ҡосаҡлаштылар, әгәр улар саҡматаш булһа, көлтәләй осҡон сәсрәр ине.
3. Тәбиғәт биргән ижади осҡон ялҡынға әүерелһен өсөн, үҙеңдең аң-дәрәжәңде, белемеңде арттырыу өҫтөндә туҡтауһыҙ эшләргә кәрәк.
4. Дөрөҫ яуап юҡ.

**41.** ***Тауҙары – алтын-көмөшкә, һыуҙары – балыкҡа, ҡырҙары игенгә бай ул ерҙең*** **һөйләмендә һыҙыҡ ни өсөн ҡуйылған?**

1. Ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һөйләмдәрҙән төҙөлгән теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм булғанға

2. Хәбәр төшөп ҡалғанға

3. Ҡапма-ҡаршы мәғәнәле тиң хәбәрҙәр араһында

4. Эйә менән хәбәр бер үк һүҙ төркөмөнән килгәнгә

**42. Айырымланған хәл әйтемле ябай һөйләмде табырға:**

1. Ниндәй матур, талғын йырлай Аҡйондоҙ.

2. Иҫ киткес, таң ҡалырлыҡ, ғәжәп матур шишмә.

3. Мең йыл быҫҡып йәшәгәнсе, бер көн дөрләп яныу артыҡ.

4. Ҡояш кисләүгә, үҫмерҙәр арып-талып йығылдылар.

**43.** ***Илле йыл үтеүгә ҡарамаҫтан, әле лә һағынып иҫкә алыр кешеләрем күп*** **һөйләмендә өтөр ни өсөн ҡуйылған?**

1. Инеш һөйләм эргәһендә булғанға.

2. Өҫтәлмәлекте айырыу өсөн.

3. Өндәш һүҙ эргәһендә килгәнгә.

4. Эйәрсән һөйләм менән баш һөйләм араһында.

**44. Хәбәр эйәрсәнле һөйләмдә ике нөктә ҡуйылған юлды билдәләргә:**

1. Кем эшләмәй (?) шул ашамай.

2. Шуныһы асыҡ (?) тау йылғаһы диңгеҙгә етмәйенсә туҡтамай.

3. Йәнә шуны өҫтәргә кәрәк (?) мин быйыл ғына уҡыуҙы тамамланым.

4. Дөрөҫ яуап юҡ.

**45.** ***Халыҡ аҡыллы әйтә: йылға короһа, үҙәне ҡала*** **һөйләменең төрөн билдәләргә:**

1. Шарт эйәрсәнле эйәртеүле ҡушма һөйләм.

2. Тиң эйәрсәнле ҡушма һөйләм.

3. Ҡатнаш ҡушма һөйләм.

4. Теҙем.

**46. Һөйләмдең төрөн билдәләргә:** ***Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы ҡабул итте.***

1. Кәм һөйләм.
2. Йыйнаҡ һөйләм.
3. Тулы һөйләм.
4. Тарҡау һөйләм.

**47. Һөйләмдең ниндәй киҫәктәре тиң булып килгән?**

1. Эйә
2. Хәбәр
3. Тултырыусы
4. Аныҡлаусы

**48. Бирелгән ҡушма һөйләмдә нисә ябай һөйләм бар:** ***Ысынлап та, директорҙың маңлай һырҙары тәрәнәйгән, ҡаштары һалынған, күҙ ҡарашы ла кәйефе юҡлығын күрһәтеп тора.***

1. Ике
2. Өс
3. Дүрт
4. Биш

**49. Ҡушма һөйләмдең төрөн билдәләргә:** ***Шуныһы ҡыуаныслы: Хәҙер беҙ һәр кемгә лә исеме йә фамилияһы менән өндәшәбеҙ, сөнки беҙҙә дүрт Гөлнара, өс Азат, ике Салауат, ике Лариса бар.***

1. Теҙем
2. Тиң булмаған эйәрсәнле ҡушма һөйләм
3. Тиң эйәрсәнле ҡушма һөйләм
4. Ҡушма һөйләмдең бөтөнләй башҡа төрө

**50. Һөйләмдәр араһынан эйә составынан ғына торғанын күрһәтергә:**

1. Көйө дәртле генә.
2. Урамға керҙек.
3. Кешегә иң ауыры – үҙ асылына төшөнөү.
4. Ағиҙел яры.